# БАШҠОРТОСТАН УҠЫТЫУСЫҺЫ

Учитель Башкортостана

№10 (980) 2017

Ижтимағи-педагогик
һәм фәнни-методик айлыҡ журнал

Общественно-педагогический
и научно-методический ежемесячный журнал



Директор-баш мөхәррир һәм мөхәрририәт рәйесе
**С.Ғ. КӘРИМОВ**
(т. 273-56-09)

Баш мөхәррир урынбаçары
**Ә.С. Раҡаева**

Яуаплы секретарь
**Т.З. Бәҙертдинова**
(т. 272-75-88)

Бүлек мөхәррирҙәре
(т. 272-60-16)
**Г.Ф. Шаһиева**
**Э.Р. Сәғиҙуллина**
nach.shkola68@mail.ru
**Ф.Р. Искәндәрова**
**Т.Ф. Миңлеәхмәтова**
**Г.Ә. Ҡускарбаева**
**И.С. Ғүмәров**

Корректор
**Г.М. Байназарова**

Компьютерҙа йыйыусы
**З.Н. Рамаҙанова**

Компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе һәм биҙәүсе
**И.Т. Ҡолбахтин**

Электрон адрес:
**uch.bash@mail.ru**
(т/факс: 272-75-88)
Сайт: **http://www.uchbash.ru**


## ЙӨКМӘТКЕҺЕ СОДЕРЖАНИЕ

### БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ / БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА


**Абуталипова Р.Ә.** А.Ә. Ғәлләмовтың ғилми-методик мираçы бөгөн дә актуаль....3
**Күзбәков Ф.Т.** Ноғман Мусиндың “Шунда ята батыр һөйәге...” романында халыҡсанлыҡ өлгөләре....6
**Муллағәлиева Л.Р.** Дәрестәрҙә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарының үтәлеше....8
**Псәнчина З.М.** Мостай йыһаны....11
**Кинйәбаева М.Ғ.** К. Кинйәбулатова лирикаһында ҡатын-ҡыҙ образы....14
**Исмәғилева Г.И.** Күңелдәрҙә сыраҡ ҡабыҙам... ....17
**Үтәйев А.Ф.** Уҡытыусы, ғалимә, етәксе....19


### БАШЛАНҒЫС МӘКТӘП / НАЧАЛЬНАЯ ШКОЛА


**Нәбиева Р.Ф.** Рух асылы беҙгә бөгөн кәрәк!....21
**Сергеева Н.Л.** Принцип полисенсорного обучения при формировании коммуникативной компетенции учащихся....23
**Мустафина Р.З.** Дидактический материал к урокам математики....26
**Горюхина М.Д.** Праздник листопада ....28


### МӘКТӘПКӘСӘ ТӘРБИӘ / ДОШКОЛЬНОЕ ВОСПИТАНИЕ


**Әмәкәсова Г.Ф.** Милләт ҡото – йолала....33


### РУССКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА


**Усманова А.В.** Мир поэзии Марины Цветаевой....35
**Терегулов А.Р.** Учителя, которые учат все понять, все пережить....38



**Ойоштороусылары:**
Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы
«Башҡортостан Республикаһы» Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы

**Учредители:**
Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан
Государственное унитарное предприятие Издательский дом «Республика Башкортостан»

16+

**Мөхәрририәт:**
А.М. Әхтәмов, З.М. Ғәбитова, Р.Ғ. Мәзитов, Ф.Б. Санъяров, Ф.Ш. Сынбулатова, А.Н. Усевич, М.Б. Юлмөхәмәтов.

Теркәү тураһындағы ПИ ФС 77-70646-сы таныҡлыҡ 2017 йылдың 15 авгусында Элемтә, мәғлүмәт технологиялар һәм киң мәғлүмәт сараларын күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығы тарафынан бирелде.

**Редакцияның һәм нәшер итеүсенең адресы:** 450076, Өфө ҡалаһы, Гоголь урамы, 34.
**Адрес редакции и издателя:** 450076, г. Уфа, ул. Гоголя, 34.

**Банкта беҙҙең реквизиттар:**
ИНН0278066967
КПП027443002
Р/счет 40602810000000000283
К/счет 30101810600000000770
БИК 048073770 Филиал ПАО Банк «УралСиб» г. Уфы

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

Ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай. Материалдарҙы «Башҡортостан уҡытыусыһы»нан күсереп баҫҡанда журналға һылтанма яһау мотлаҡ. Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин. Баҫылған материалдарҙағы мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгө өсөн авторҙар яуаплы.

© «Башҡортостан уҡытыусыһы», 10 (980), 2017.

«Башҡортостан» дәүләт республика нәшриәте типографияһында әҙер файлдарҙан баҫылды (450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Баҫырға ҡул ҡуйылды: 05.10.2017 й.
Офсет ҡағыҙы.
Ҡағыҙ форматы 70х100 1/16.
Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 7,8.
Иҫәп-нәшер табаҡ 12,8.
Тиражы 8054 дана.
Заказ №Г430.
Хаҡы ирекле.

## МИЛЛИ ТЕЛДӘР ҺӘМ ӘҘӘБИӘТТӘР — НАЦИОНАЛЬНЫЕ ЯЗЫКИ И ЛИТЕРАТУРЫ

**Фәтхетдинов Ф.К.** Башкалабыз Уфаның Галимҗан Ибраһимовның тормышына һәм эшчәнлегенә йогынтысы.....41
**Гыйлемҗанова Р.Т.** Табигать һәм Кеше.....46
**Тимофеева З.Ф.** Профессионализмсем.....49
**Тойгильдина И.Г.** Туныктымо пашаште историко-краеведческий очерк-влакым кучылтмо да «Шоръял» книга нерген.....51

## ИНОСТРАННЫЙ ЯЗЫК В ШКОЛЕ

**Саитгалиева А.Г.** How we keep our planet clean.....52

## ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ — КРАЕВЕДЕНИЕ

**Аминев З.Г.** Параллели между генеалогической легендой скифов и башкирской космогонией.....54
**Горюнова Н.А.** Народные традиции и обычаи.....56

## ТӘБИҒИ ҺӘМ ТЕҮӘЛ ФӘНДӘР — ЕСТЕСТВЕННЫЕ И ТОЧНЫЕ НАУКИ

**Махмутова Ф.В.** Профессиональная ориентация в условиях профильного обучения математике и информатике с использованием ЭОР в сельской школе.....60
**Екомасов Е.Г., Назаров В.Н.** Региональный этап Всероссийской олимпиады школьников по физике.....65
**Динисламова Г.Р., Андрзянова А.С.** Наша задача – воспитание гражданина и труженика.....72

## ПРОФЕССИОНАЛЬНОЕ ОБРАЗОВАНИЕ

**Амирова Л.А.** Гордимся каждым днем.....74

## ТӘРБИӘ ҺӘМ ӨҪТӘЛМӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ — ВОСПИТАНИЕ И ДОПОЛНИТЕЛЬНОЕ ОБРАЗОВАНИЕ

**Кошелева Е.А., Абулгатина А.С.** Понимать и чувствовать природу.....79
**Хох И.Р.** Вопросы Интернет-безопасности.....82

## МӘҒАРИФҠА ИДАРА ИТЕҮ — УПРАВЛЕНИЕ ОБРАЗОВАНИЕМ

**Ахияров К.Ш.** Педагогические идеи В.А. Сухомлинского.....88
**Ишембәтова Р.Ә.** Уҡытыусыларҙың да уҡытыусыһы.....92
**Яманһарова З.В.** Ысын уҡытыусы ине.....93

Беҙҙең календарь.....96

## Башҡорт теле һәм әҙәбиәте

# А.Ә. Ғәлләмовтың ғилми-методик мираҫы бөгөн дә актуаль

**Р.Ә. АБУТАЛИПОВА,**
БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы профессоры,
филология фәндәре докторы

Ағымдағы йылдың март айында Башҡорт дәүләт университеты базаһында күренекле ғалим-методист Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған Бөтә Рәсәй фәнни-методик конференцияһы булып үтте. Конференцияла А.Ә. Ғәлләмовтың фәнни-методик һәм педагогик эшмәкәрлеге, йәш быуынды тәрбиәләүҙә туған телдең роле, Башҡортостан Республикаһының мәғариф учреждениеларында, Рәсәй Федерацияһының башҡа региондарында башҡорт һәм башҡа телдәрҙе өйрәнеүҙең хәҙерге проблемалары, фәндең традицион һәм яңы йүнәлештәре шарттарында башҡорт филологияһы, сағыштырма тел ғилеменең проблемалары ҡаралды.

Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов башҡорт грамотаһына өйрәтеү методикаһы фәненә нигеҙ һалыусылар араһында айырым урын биләй. Уның исеме башҡорт теленән тәүге уҡыу китаптары яҙған В. Катаринский, А. Бессонов, З. Айыухановтар менән бер рәттә тора.

А.Ә. Ғәлләмов 1926 йылдың 15 октябрендә Баймаҡ районы Күсей ауылында тыуа. Тәүге белемде ул Баймаҡ районының абруйлы уҡытыусылары Әсмә Баймырҙина, Мостафа Зәйнәғәбдинов, Ғәҙел Әҙеһәмовтарҙан ала.

Абдрахман Ғәлләмов 1943 йылда Темәс педагогия училищеһына уҡырға инә. Ә. Ғәлимов, С. Алсынбаев, Ә. Ниғмәтуллин, К. Ғәлимов, Г. Измайлова, З. Зөбәйеров кеүек юғары квалификациялы педагогтарҙың йоғонтоһонда үҫмерҙә башҡорт теле һәм уны уҡытыу методикаһы фәненә ҙур ҡыҙыҡһыныу уяна. Артабан ул уҡыуын К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегендә дауам итә. Бында уға башланғыс кластар буйынса методист У. Хөснөтдиновтың (У. Хөсни, Х. Усман) йоғонтоһо көслө була.

1948 йылда А.Ә. Ғәлләмов Белорет педагогия училищеһында эш башлай, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, матур яҙыу дәрестәрен алып бара, студенттарҙың педагогик практикаһы менән етәкселек итә. Училищелағы эш тәжрибәһе Абдрахман Ғәлләмовтың артабанғы яҙмышын билдәләүгә ҙур этәргес була. Бында ул тәү башлап уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү, туған телдең грамматик төҙөлөшө, дәрестә һәм дәрестән тыш уҡыу, телмәр үҫтереү мәсьәләләре өҫтөндә әүҙем эшләй, үҙ аллы ғилми хеҙмәттәр яҙа башлай.

Буласаҡ ғалим-методист 1953 — 1957 йылдарҙа Баймаҡ районының Сибай ҡасабаһы мәктәптәрендә туған тел,

әҙәбиәт, тарих, логика предметтарын уҡыта, башланғыс класс уҡытыусыларының методик берекмәһен етәкләй, ҡала халыҡ мәғарифы бүлеге инспекторы булып эшләй.

1958 йылда А.Ә. Ғәлләмов Башҡортостан уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу институтына эшкә алына, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса методист, туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кабинеты мөдире була. Бер үк ваҡытта грамотаға өйрәтеү проблемалары өҫтөндә ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара, башҡорт «Әлифба»һы, грамотаға өйрәтеү тарихы, грамотаға өйрәтеү методикаһы буйынса ғилми хеҙмәттәр, методик әсбаптар яҙа. 1968 йылдан алып ғүмеренең һуңғы көндәренә (1989 йыл, 19 февраль) тиклем Башҡорт дәүләт университетында доцент вазифаһын башҡара.

Мәғариф өлкәһендәге һәм ғилми-тикшеренеү эштәрендәге уңыштары өсөн Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмов «РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы», «Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ була, 1975 йылда К. Ушинский миҙалы менән бүләкләнә.

А.Ә. Ғәлләмов 1967 йылда Ж.Ғ. Кейекбаев етәкселегендә башҡорт телен уҡытыу методикаһы буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. Ғилми хеҙмәттә башҡорт грамотаһына өйрәтеү методикаһы тәүге тапҡыр фәнни нигеҙҙә яҡтыртыла. Хеҙмәттең төп ҡиммәте булып ике мөһим ҡағиҙә тора. Беренсенән, Абдрахман Әбдрәхим улы өн-хәрефтәрҙе өйрәнеүҙең яңы тәртибен индерә. Ул грамотаға өйрәтеүҙе телмәрҙә иң йыш ҡулланылған 6 һуҙынҡы өн-хәрефтән *(а – ә, о – ө, у – ү)* башлауҙы тәҡдим итә һәм үҙ фекерен төплө итеп фәнни яҡтан дәлилләй.

Билдәле булыуынса, тәү башлап уҡырға өйрәтеү ижекләп уҡыуға нигеҙләнә. Ә ижекте һуҙынҡы өндәр яһай: һүҙҙә нисә һуҙынҡы өн, шунса ижек була. Телмәрҙә йыш ҡулланылған был алты һуҙынҡыны алдан өйрәнеү һәр яңы тартынҡы өн менән күп төрлө ижек һәм ике-өс өндән торған һүҙҙәр төҙөү мөмкинлеге бирә: *ат, от, ут, үт; тот, тут.* Уҡыусылар тәүге дәрестәрҙән үк һүҙҙәр һәм ике-өс һүҙҙән торған һөйләмдәр уҡый башлай.

Өн-хәрефтәрҙе өйрәнеүҙең яңы тәртибе башҡорт грамотаһына өйрәтеүҙә айырыуса мөһим. Башҡорт телендә тартынҡы өндәр ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡы өндәр эргәһендә ассимиляцияға бирелеп, ҡаты йәки ярым йомшаҡ әйтелә: *ат – әт; бор – бөр; ут – үт; ҡул – күл.* Был үҙенсәлек ижектәрҙе әйткәндә асыҡ күренә: тартынҡыны әйтер алдынан беҙ үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән иғтибарҙы унан һуң килгән һуҙынҡыға йүнәлтәбеҙ *(мө-)*, һуҙынҡының сифатын тартынҡы өнгә күсереп, телмәр ағзаларын һуҙынҡы өндө әйтергә әҙерләйбеҙ. Шунан һуң ғына ижекте әйтәбеҙ. Тимәк, дөрөҫ уҡыу өсөн иң башта ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙың айырмаһын үҙләштерергә кәрәк. Сағыштырығыҙ: рус телендә тартынҡылар үҙҙәре ҡаты һәм йомшаҡҡа бүленә һәм уларҙы билдәләү өсөн махсус тел саралары *(ь, я, ю, е, ё)* ҡулланыла: *угол – уголь; вагон – огонь; мал – мял.*

Абдрахман Әбдрәхим улы хеҙмәтенең икенсе мөһим үҙенсәлеге – башҡортса уҡыу грамотаһына өйрәтеүҙә телмәр өндәрен анализлау һәм синтезлау методын ҡулланыу мөмкинлеген ғилми яҡтан нигеҙләү, уны башҡорт теленең эске ҡанундарына, лексик, грамматик, фонетик үҙенсәлектәренә һәм яҙыуҙағы шартлы билдәләр системаһына яраҡлаштырыу.

Грамотаға өйрәтеүҙе был методҡа ярашлы ойоштороғанда, телмәр өндәре һүҙҙәр, һөйләмдәр һәм бәйләнешле тел-

мәр эсендә анализлана. Бының өсөн уҡыусыла үҙ фекерен әйтеп биреү теләге уятырлыҡ телмәр ситуацияһы булдырыла, диалог, һорау-яуап формаһындағы ябай әңгәмә, бәхәс, фекер алышыу ойоштоstartрола. Телмәр өндәрен анализлау һәм синтезлау эҙмә-эҙлелеген шартлы рәүештә ҡом сәғәте формаһында күҙ алдына килтерергә мөмкин.




Абдрахман Әбдрәхим улы тарафынан башҡорт грамотаһына өйрәтеүгә яраҡлаштырылған өндәр методының төп положениелары түбәндәгеләр:

- тәү тапҡыр уҡырға өйрәтеүҙең нигеҙен телмәр өндәре өҫтөндә эшләү тәшкил итә;
- грамотаға өйрәтеүҙең бөтә этаптарында өндәрҙе анализлау һәм синтезлау үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә алып барыла;
- ижекләп уҡырға өйрәтеү – грамотаға өйрәтеүҙә төп маҡсаттарҙың береһе;
- балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүҙә һүҙгә фонетик анализ яһау һәм артикуляцион күнегеүҙәр үткәреү төп роль уйнай;
- уҡырға өйрәтеү яҙырға өйрәтеү менән айырылғыһыҙ бәйләнешле;
- яҙыу – телмәрҙең икенсе баҫҡысы.

Өндәр методы эҙмә-эҙлекле алымдар ярҙамында үткәрелгән анализ һәм синтез күнегеүҙәренән тора. Улар кескәй уҡыусыларҙы грамотаға мөмкин тиклем тиҙ өйрәтеү һәм тәрбиә биреү бурыстарынан сығып билдәләнә. А.Ә. Ғәләмовтың өндәр методына ярашлы төҙөлгән «Әлифба» дәреслеге (1962 йыл) күренекле методистың иң ҙур ҡаҙанышы иҫәпләнә. Дәреслек үҙенең төҙөлөү принциптары, йөкмәткеһе, өн-хәрефтәрҙе өйрәнеү тәртибе менән уға тиклем нәшер ителгән уҡыу ҡулланмаларынан күпкә отошло, шуға ла ул төрлө күргәҙмәләрҙә ҡатнаша, дипломдар һәм дәртләндереү бүләктәренә лайыҡ була.

Ғалим-методистың һуңғараҡ нәшер ителгән хеҙмәттәре лә башҡорт грамотаһына өйрәтеү методикаһына бағышланған. Уның ғилми-методик мәҡәләләре «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында донъя күрә, «Грамотаға өйрәтеү» (1984 йыл), «Алты йәшлектәрҙе уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү» (1988 йыл) тип аталған методик ҡулланмалары, грамотаға өйрәтеү буйынса дидактик материалдар, яҙыу өлгөләренән торған дәфтәрҙәр баҫылып сыға.

Дөйөмләштереп әйткәндә, Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәләмов башҡорт грамотаһына өйрәтеү барышында ҡулланыуға тәҡдим иткән өн-хәрефтәрҙе өйрәнеү тәртибе, телмәр өндәрен анализлау һәм синтезлау алымдары баланы тәү башлап уҡырға һәм яҙырға өйрәтеүҙең иң уңайлы һәм һөҙөмтәле ысулдары һанала. Грамотаға өйрәтеүгә тәғәйенләнгән ҡулланмалары, уҡытыу-методик материалдары, методик эшкәртмәләре үҙ-ара тығыҙ бәйле берҙәм комплектты тәшкил итә. Был хеҙмәттәр хәҙерге заман мәктәптәре талаптарына тулыһынса яуап бирә, шуға ла Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәләмовтың ғилми-методик мираҫы актуаллеген юғалтмай.

# Noғман Мусиндың “Шунда ята батыр һөйәге...” романында халыҡсанлыҡ өлгөләре

**Ф.Т. КҮЗБӘКОВ,**
БДУ профессоры

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Noғман Мусин алты тиҫтә йылдан артыҡ ижад итеү осоронда утыҙлаған повесть һәм хикәйәләр, дүрт роман, дилогия, трилогия авторы, башҡорт әҙәбиәте тарихында һайланма әҫәрҙәренең ун ике томлығын сығарған берҙән-бер һүҙ оҫтаһы булып танылды. Яҙыусы үҙ әҫәрҙәрендә туған телебеҙҙең мөғжизәгә тиң мөмкинлектәрен ювелирҙарса ҡулланып, милли колорит менән һуғарылған тәбиғәт күренештәрен, үҫеш-үҙгәрештә бирелгән образ-характерҙар галереяһын, берсә һәүетемсә, берсә ҡайнап-урғылып аҡҡан тормош ваҡиғаларын аңға ла, йөрәккә лә үтерлек итеп тасуирлай алды.

Әлбиттә, бер фирҡәлелек дәүерендә әҙип коммунистик идеология шауҡымының тиҫкәре эҙемтәләрен дә кисерҙе. Шуға ла унын 1990 йылдарға тиклемге әҫәрҙәренә ваҡиғалар үҫешенең тура һыҙыҡлылығы, геройҙарҙың башлыса ыңғай һәм кире типҡа ғына бүленеүе хас. Әйтергә кәрәк, ул осорҙа был “бәлә” яҙыусыларыбыҙҙың береһен дә урап итмәне, тиерлек. Айырма бары шунда: кемдер илдә алып барылған сәйәсәткә ихлас инанып ижад итте, кемдер ҡараны аҡ тиеүҙән тартынманы. Һоҡланғыс талант эйәһе Noғман Мусин һәр саҡ йөрәк ҡушыуынса ижад итте, үҙ заманының улы булып, тормош ағышын күпселек осраҡта халҡы күҙлегенән баһаланы.

Авторҙың яҙыусылыҡ оҫталығы, донъяны, йәшәйеште күҙаллау һәм баһалау кимәле Алдар батырға арналған эпик ҡоласлы романында уңышлыраҡ асылды. Әҫәрҙең төп геройы — ҡапма-ҡаршылыҡлы характерлы, көслө ихтыярлы шәхес. Уны совет осоронда идеаль итеп һүрәтләнгән райком секретары (“Яралы кеше тауышы”) менән бутау мөмкин түгел. Шулай уҡ ул легендаларға торошло Төлкөсуранан да (“Мәңгелек урман”) ныҡ айырыла.

Алдар Иҫәкәев, тарихи шәхес булараҡ, бығаса төрлө яҙма документтар, халҡыбыҙҙың ижади хәтере аша ярайһы асыҡ төҫмөрләнһә лә, яҙыусының тойом-һиҙемләүе, художестволы күҙаллауы уны тәрәнерәк аңларға ярҙам итә. Йылҡы малы ғына ете меңдән ашыу иҫәпләнгән бай аҫабаның әҫәр һуҙымындағы эш-хәрәкәте, ҡатмарлы яҙмышы, тулы ҡанлы тормошо, уйланыуҙары, икеләнеү-өмөтләнеүҙәре психологик яҡтан ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнә. Алдар батыр ҡатнашҡан ваҡиғалар башҡорт иләндәге хәлдәрҙе генә сағылдырып ҡалмай, ә Рәсәйҙәге һәм күрше мәмләкәттәрҙәге ошо осор һулышы менән тығыҙ үрелештә художестволы тасуирлана. Иң мөһиме — әҫәрҙе ерлекле итеүсе халыҡсанлыҡ сифаты романдың һәр күҙәнәгенә тиклем үтеп инә. Башҡорт мөхитендә тыуып-үҫеп, унын тарихи яҙмышын, рухи ҡиммәттәрен, ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәрен ҡанына һеңдергән әҙип тәбиғәт күренештәрен, конкрет хәл-ваҡиғаларҙы, төп геройҙы, эреле-ваҡлы персонаж-

дарҙы халыҡ күҙлегенән сығып ҡылыҡһырларға, баһаларға ынтыла. Бында ниндәй ҙә булһа идеологияның баҫымы һиҙелмәй.

Әҫәрҙәге халыҡсанлыҡ сифаты менән һуғарылған тасуирҙарға иғтибар итәйек. *(Миҫалдар 6-сы томдан алынды.)*

**Тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү.**

Ирәндек яғынан иртәле-кисле көҙ тындары бәрелә башланы. Таңға ҡырау төшәлә һорғолт тут сыбарлаған ергә ялпаша башлаған үләндәрҙе туңдырып, аҡ ҡылау менән ҡаплай. Ҡояш нурҙары көндө имшеттеме, ергә төрлө төҫтәге ағас япраҡтары яуырға керешә. Ҡайҙа ғына ҡарама, ялан да ялан. Күк ҡабағы офоҡҡа барып төртөлгән ергәсә һирәк-мирәк убаларҙан, йырын буйҙарында үҫкән ҡыуаҡтарҙан башҡа ер битен биҙәгән һис ни күрмәҫһең. Һирәк-мирәк күҙгә салынған ауылдары уя буйҙарына боҫоп ултырған.

**Теге йәки был күренешкә халыҡсан баһа биреү.**

•Йылҡыға ҡылған булдымы, башҡа үләнең ары торһон, ә ҡылған ҡоролоҡҡа бирешмәй. •Ул ҡәһәр һуҡҡырҙары оҙаҡламай йәнә килеп етер... *(Һуҙ яһаҡ йыйыусылар хаҡында.)* •Айыҡтужа улының тирмәһе иркен, ун ике кирәгәле. Йыуан бүрәнәләрҙән нигеҙ ҡороп тартылған. Иҙәндә ике-өс ҡат кейеҙ, ишек яғына ҡоралай тиреләре ҡапланған... Ҡышты йырлап сығырға була... •Иҫәкәй, абруй һаҡлап, ҡабаланмай ғына уға *(Мәмбәтсураъа)* ҡарай атланы.

**Халыҡ тәжрибәһен дөйөмләштереү.**

•Өйөр айғырын менеп тә, егеп тә йөрөмәйҙәр, ул тик үҙенә тапшырылған эште генә башҡарырға — өйөрөндәге йылҡыларҙы ҡарарға тейеш. •Етди мәсьәлә хәл ителгән бындай йыйында бер-берендән уҙҙырырға тырышып тамаҡ ярыу ғәҙәте юҡ. Һәр кем үҙ һүҙен бик уйлап, берәгәйле әйтергә тырыша. •Көндәш бер көн серҙәш булһа, биш көн һөйməҫ. Көн яманлыҡтары бер ни түгел, көндәш менән йәшәү ялҡыта. •Талашлы йортҡа ҡот ҡунмаҫ.

**Халыҡтың күҙәтеүсәнлеген еткереү.**

Елкәһе киң, яурындары төшөнкөрәк, көслө кешеләргә хас булғанса, терһәктәре ян-яҡҡа ҡалтайыбыраҡ тора, тарбанлабыраҡ атлай.

**Геройҙарҙың халыҡсан тел менән һөйләшеүе.** •“Ағайың мал ҡыуып киткәс, ҡарышҡан шикелле, бер кирәгәһе ысҡынды ла ел өрөп тик тора... Атағатаҡ, улай тимәгә ни, еңгәнден ҡурҙымынан да ауыҙ итмәгәс...” •Миңлеғужа: “Ана хәҙер Исәт, Мейәс буйҙарын урыҫ баҫып алып бөттө, зауыт ҡоралар, ер аҡтаралар, ҡәлғә төҙөйҙәр. Беҙҙең кеүек ғүмере баҡый ошонда көн иткән халыҡтан һорау-нитеү юҡ. Бөгөн ана Сәнәй буйынан ҡыуып ебәрҙек. Ә йыртҡыс бер ҡан есен тойһа, ҡыуып ебәреп буламы?..”

**Башҡорттоң ҡан ҡойошло яуға күтәрелеү сәбәптәрен асыҡлау.**

Солоҡҡа бал һалымы арта, кейәүгә бирелгән ҡыҙҙың ҡалымына, һуйылған мал тиреһенә, баҙарға, тирмәнгә барған өсөн, һәр дуға һәм ҡамыҡҡа, мәке сапҡан өсөн, ҡапҡа һәм тәҙрәләргә, мулла һәм мәсеттәргә айырым һалым. Туй үткәргәнгә ун бер алтын, икенсе тапҡыр үткәрһәң – егерме ике, ике күҙгә бер аҡса... Күтәрелеш етәкселәренең береһе Дөмәй Ишкәев йәй урталарында ҡыйырһытылыуҙарҙан аралауҙы батшанан һорау өсөн Мәскәүгә бара. Батша ҡабул итмәй. Һаҡ аҫтында Ҡазанға оҙаталар ҙа Дөмәйҙе аҫалар, ҡалғандарын — төрмәгә. Алдарбайҙың икеләнеп йөрөүҙәре һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты... Бындай яман

көстән, муйынын һындыра һуҡмайынса, ҡотолоп булмаясаҡ тигән ҡәтғи ҡарарға килде.

Властың башҡорттар менән әҙәмсә мөғәмәлә итеренә өмөтө аҙаҡҡаса һүнмәй Алдарҙың. Тик уларҙың хыянатсыл сәйәсәте арҡаһында һәләк була. Шулай ҙа ул батыр исеменә тап төшөрмәй, халҡының арҙаҡлы улы, ил ағаһы булып ҡала.

Күренеүенсә, Ноғман Мусин, тарихи документтарға, халыҡ хәтере ҡәҙерләп һаҡлаған риүәйәттәргә нигеҙләнеп, йыйған, тапҡанын ҡабатланмаҫ талантына ярашлы ижад ҡаҙанында ҡайнатып, арҙаҡлы шәхесебеҙҙең һоҡланғыс художестволы образын иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиғалар солғанышында, башҡорт мөхитендә тыуҙыра алған.

# Дәрестәрҙә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарының үтәлеше

**Л.Р. МУЛЛАҒӘЛИЕВА,**
Борай районы Борай ауылының 2-се гимназияһы уҡытыусыһы

Бөгөн белем биреү системаһы, мәғариф өлкәһендәге үҙгәрештәр дәрестәргә яңы талаптар ҡуя. Улар Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында асыҡ сағылыш таба.

**ФДББС индереү шарттарында башҡорт теле дәрестәренә түбәндәге талаптар ҡуйыла.**

- Методик яҡтан дөрөҫ ойошторолған дәрес яҡшы йыһазландырылған кабинетта үткәрелергә тейеш. Дәресте заман талаптарына ярашлы итеү өсөн компьютер, интернет, мультимедиа проекторы, электрон дәреслектәр булыуы мотлаҡ.
- Уҡытыусы үҙенең һәм уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген алдан планлаштырып, дәрес башында маҡсат, бурыстарҙы анығ билдәләргә тейеш. Уны уҡыусыларҙан билдәләтеү отошлораҡ.
- Дәрес проблемалы һәм үҫтереүле булырға, уҡытыусы уҡыусыларҙы эшмәкәрлеккә, класташтары менән хеҙмәттәшлеккә йүнәлтергә бурыслы. Бирелгән эште төркөмдәрҙә башҡарыу ҡулай тип табыла. Был осраҡта уҡыусылар аралаша, бер-береһенең белемен тулыландыра, башҡаларҙы тыңларға өйрәнә.
- Уҡытыусы проблемалы һәм эҙләнеү ситуациялары ойоштора, уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Яңы стандарттар буйынса уҡыусыға әҙер белем һәм мәғлүмәт биреү түгел, ә уларҙы үҙ аллы эҙләнеп табырға өйрәтеү маҡсаты ҡуйыла. Ниндәйҙер ҡыҙыҡлы ситуация, проблеманы сисеү аша табылған белем хәтерҙә нығыраҡ һаҡлана.
- Репродукция — аҙ, ә ижад һәм ижадташлыҡ күберәк булырға тейеш. Элек тема аңлатҡандан һуң, мәҫәлән, сифаттарҙы табыу, дәрәжәләрен билдәләү йәки сифаттарҙы тейешле урындарына ҡуйыу кеүек репродуктив биремдәр ҡарала ине. Бындай эштәрҙе үтәгәндә уҡыусы тар фекер йөрөтә, уның универсаль уҡыу күнекмәләре үҫешмәй.
- Ваҡытты рациональ ҡулланыу, һаулыҡ һаҡлау һәм хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре үтәлеүе — төп шарттарҙың береһе. Дә-

рестең ваҡыты циклэнгән, шуға ла уны файҙалы итеп ҡулланыу мотлаҡ. Яңы стандарт буйынса мәктәптә һаулыҡ һаҡлауға ҙур урын бирелә. Уны ла төрлөсә хәл итергә мөмкин: 5-се, 6-сы кластарҙа ял минуттары үткәрергә йә, киреһенсә, ҡулдарҙы партаға һалып, баштарҙы терәп тып-тын ғына ятып торорға, был ваҡытта тыныс ҡына көй уйнатырға мөмкин. Өлкәнерәк кластарҙа, ял иттереү өсөн, спорт, сәләмәтлек менән бәйле, уҡыусы өсөн файҙалы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән таныштырып, тестар эшләтеп була.

- Уҡыусының дәрес үҙәгендә булыуын хәтерҙән сығарырға ярамай. Ҡайһы бер уҡытыусылар дәрестең күп ваҡытын үҙҙәре һөйләп үткәрә. Беҙгә, киреһенсә, уҡыусыларҙы күберәк, файҙалыраҡ эшмәкәрлеккә йәлеп итергә кәрәк.
- Уҡыусыларҙың мөмкинлектәрен һәм шәхси үҙенсәлектәрен, кластың профилле булыуын, уҡыусыларҙың тырышлығын иҫәпкә алыу мотлаҡ. Әлбиттә, биремдәр, алымдар кластың белем кимәленә ҡарап һайлана. Улай ғына ла түгел, уҡыусыларға төрлө ауырлыҡтағы эштәр бирелә. Белем кимәле бер булған уҡыусылар менән эште төркөмдәрҙә башҡарырға мөмкин.
- Кире бәйләнеш булдырылырға тейеш.
- Дәрестең йылы мөнәсәбәттә үтеүе мөһим.
- Рефлексия булыуы мотлаҡ. Ул дәрестә һәр саҡ булды, ләкин әле талап ителгән кимәлдә түгел, ә “Дәрес оҡшанымы, тема аңлашылдымы?” кеүек һорауҙар аша ойошторола ине. Хәҙер иһә рефлексия: “Ниндәй маҡсаттар ҡуйғайныҡ? Маҡсаттарға ирештекме? Нисек? Һөҙөмтәләр ниндәй? Тағы ла нимәләр эшләргә тейешһегеҙ? Бөгөнгө белемде тормошта ҡайҙа һәм нисек файҙаланырға мөмкин? Һинең ҡайһы эшең бигерәк тә уңышлы килеп сыҡты? Киләсәктә нимә өҫтөндә эшләргә кәрәк?” кеүек һорауҙар менән бәйле.

Ғәҙәти дәрестәр уҡыусыларҙың өй эшен тикшереү, дәрестең икенсе өлөшөндә яңы тема аңлатып, нығытыу һәм өйгә эш биреү менән тамамлана ине. Яңы стандарттар буйынса дәрестә тирәяҡты танып белеүгә мотивация булдырыу, алған белемде тормош менән бәйләү, уҡыусыны тормошҡа әҙерләү, мәғлүмәтте эҙләп табыу, белем һәм күнекмәләрҙе тормошта ҡулланыу мөмкинлеген күрһәтеү төп бурыс булып тора.

Яңы быуын Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы дәрес структураһына үҙгәрештәр индерелде, түбәндәге яңы этаптар билдәләнде:

– белем һәм оҫталыҡты актуалләштереү;

– проблема ҡуйыу;

– гипотезалар тәҡдим итеү;

– проблеманы хәл итеү өсөн кәрәкле белемде эҙләү;

– тәүге (беренсел) белемде нығытыу;

– алған белемде проектта сағылдырыу.

Предметты өйрәнеү түбәндәге һөҙөмтәләргә алып килергә тейеш:

– **шәхсән һөҙөмтәләр:** уҡыусы һәр яҡлап үҫкән, үҙ аллы белем алырға, камиллашырға әҙер шәхес булараҡ формалаша;

– **метапредмет һөҙөмтәләр:** белем алыу нигеҙен тәшкил иткән төп компетенцияларға эйә була, предмет-ара төшөнсәләрҙе үҙләштерә.

Яңы стандарттар буйынса уҡыусы-

ларҙа лингвистик (тел, уҡыусыларҙың башҡорт теленән мәғлүмәтлелеге), аралашыу (коммуникатив, уҡығанды һәм башҡалар һөйләгәнде аңлау, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нормаларына эйә булыу), этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡ ауыҙ-тел ижады өлгөләрен белеүе, башҡорт халҡының телмәр әҙәплелеген үҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларын ихтирам итеүе) компетентлыҡ булдырыу талап ителә;

– **предмет һөҙөмтәләре:** башҡорт теле программаһы буйынса белем һәм күнекмәләргә эйә була; ижади эшмәкәрлек тәжрибәһен, белем-күнекмәләрен ғәмәли файҙалана ала.

Мәктәп шарттарында универсаль уҡыу эшмәкәрлеге – ул уҡыу-уҡытыу процесында уҡыусыларҙа белем алыуға ыңғай мотивация булдырыу аша яңы белем, күнекмә һәм компетенцияларҙы үҙ аллы уңышлы үҙләштереү, йәғни уҡый белеү мөмкинлеген биреүсе дөйөмләштерелгән эшмәкәрлек.

Универсаль уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәре дүрт блокка бүленә: 1) шәхси; 2) регулятив; 3) танып белеү; 4) коммуникатив.

Универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең был төрҙәре уҡыу программаһындағы һәр фәнде үҙләштергәндә комплекслы, системалы үҫтерелергә тейеш.

Уҡыусыларҙың дәрестән тыш эшмәкәрлеге Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарын тулыһынса тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирә. Дәрестән тыш эштәр белем биреү процесының бер өлөшө булып тора. Шуға ла уҡыусыларҙың белемен тәрәнәйтеү, эстетик зауығын, ижади һәләттәрен үҫтереү, донъяға ҡараштарын формалаштырыу маҡсатынан, мәктәптә кластан тыш эштәрҙе ойоштороуға ҙур иғтибар бүлергә кәрәк.

Башҡорт теле буйынса уларҙың төрҙәре ғәжәйеп күп: телдән журнал, бәйге, викторина, диспут, ижад түңәрәге, ғалимдар, яҙыусылар менән осрашыу, экскурсия, конференция. Был эштәрҙең барыһы ла төп программа материалын тәрәнерәк өйрәнеүгә, киңәйтеүгә, уҡыусыларҙың телгә, мәҙәниәткә ҡыҙыҡһыныуҙарын арттырыуға хеҙмәт итергә тейеш.

**Өй эштәренә талаптар**

Башҡорт теленән өй эше дәрестә формалаштырылған универсаль уҡыу ғәмәлдәрен нығытыу маҡсатынан бирелә. Өйгә стандарт булмаған, мәҫәлән, проблемалы ситуацияларға, эшлекле уйындарға, конкурстарға, ярыштарға («кем тиҙерәк? күберәк? яҡшыраҡ?»), ижади эштәргә (инсценировка, лингвистик әкиәт, йомаҡ, проект, ребус, схема) ҡоролған эштәр бирергә мөмкин. Шулай уҡ, белемдәрҙе тикшереү маҡсатынан, тест һорауҙары, төрлө биремдәр менән карточкалар төҙөргә тәҡдим итергә була. Ҡатмарлылығына ҡарап, бер нисә өй эше бирергә мөмкин. Уҡыусы, үҙ мөмкинлегенән сығып, береһен генә башҡара. Өй эшенең күләме артыҡ ҙур булырға тейеш түгел. Шуға ла СанПиН нормаларын да хәтергә төшөрөү ҡамасау итмәҫ.

СанПиН 2.4.2. 2821-10 нормаларына ярашлы, барлыҡ предметтарға бирелгән өй эшенең күләме, сәғәттәр һаны түбәндәгесә: 1-се класта өй эше бирелмәй; 2 – 3-сө класта – 1,5; 4 – 5-се класта – 2; 6 – 8-се класта – 2,5; 9 – 11-се класта – 3,5 сәғәт.